*Камил ХАЖИӘХМӘТОВ*



# Тажы асылғанда сәскә матур

*Башкортостандың атказанған артисткаһы Сара Буранбаеваның ижад юлы 1988 йылда Өфө сәнғәт институтын тамамлағас, Йәш тамашасылар театрының сәхнәһендә башлана. Ул бында йәштәрзе лә, өлкәндәрзе лә һөйөндөргән матур-матур ролдәр ижад итә. Дүрт-биш мизгелдән һуң театр Республика милли йәштәр театры тип үзгәртелгәс тә зур өмөттәр вәғәзә иткән һәләтле артистка колас ташлап бирһенән-бирһе матур ролдәр уйнауын дауам итә. 1998 йылда иһә уны сәнғәтебеззең төп сәхнәһе — Башкорт академия драма театрына эшкә сакыралар.*

*Мәңге тулкынландырғыс, әммә үтә лә ауыр, һикәлтәле һукмаклы театр тормошо һәм шул тормоштоң сағыу бер вәкиле — Сара Буранбаева хакында булыр бөгөнгө һүзебез.*

...Сараның сәхнәне һайлап алыуы һис көтмәгәнсә була. Ул ғөмүмән сәнғәт, театр хаҡында уйламай ҙа ине. Дөрөҫ, мәктәп сәхнәһендә ул оҫта бейеүселәрҙән һаналды, әммә профессиональ артистка булып китеү өсөн был ғына етмәгәнен яҡшы аңлай.

— Мин врач булырға хыяллана торғайным, — тип хәтерләй Сара. — Атайым да хуп күрҙе быны. Урта мәктәпте тамамлағас та, ул мине, етәкләп тигәндәй, Өфө медицина институтына алып килде. Үкенескә ҡаршы, унда конкурстан үтә алманым, етмәһә, әсәйем бик ҡаты сирләп китте. Ауылға ҡайтып, уны тәрбиәләштем, фермала быҙауҙар ҡарап йөрөнөм...

Һүҙ ыңғайында шуны әйтеп үтәйек: Сара Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылы ҡыҙы. Атаһы «Урал» совхозында эшләй, әсәһе — хужабикә. Улар биш бала тәрбиәләп үҫтергәндәр. Сара ғаиләлә икенсе бала.

— Сәнғәт һуҡмағына боролош ҡасан һәм нисегерәк башланды һуң?

— Шул йәйҙе беҙҙең ауылға Рәүилә Хажиева менән Роберт ағай Зәһретдиновтар килгәйне. Мин уларҙың икеһен дә ныҡ яратам, сикһеҙ ихтирам итәм. Бер кисте



10-2001.p65 188 02.11.01, 15:35

шулай Рәүилә апай менән клубта бейеүемде күреп ҡалған да, «Әйҙә, мин һиңә бейеү ҡуям», ти. Мин берсә шатландым, берсә ҡайғырҙым. Шатланыуымдың сәбәбе аңлашылалыр: ярты донъяны урап сыҡҡан мәшһүр бейеүсе һиңә, ябай ауыл ҡыҙына, бейеү ҡуйһын әле! Ә хәсрәтләнеүемдең сәбәбе тағы ла ябайыраҡ: минән бейеүсе сыҡмаҫ кеүек. Роберт ағай ҙа өгөтләй: «Әйҙә, һылыуым, баянда үҙем уйнайым», ти. Ул бит, беләһегеҙҙер, баянсы ла, ҡурайсы ла, атаҡлы ҡумыҙсы ла. Шундай маһир кешеләр өгөтләгәс, ахыр сиктә, мин дә ризалаштым. Бейеү арыу килеп сыҡты шикелле. Шул ҡыҙыулыҡ менән һәм Рәүилә апайҙың кәңәшен тыңлап, мин сәнғәт институтына барып индем.

Тормошта бына ошондай көтөлмәгән хәлдәр ҙә осрап ҡуя. Тик бында шуныһы мөһим: Сара Буранбаева өсөн был хәл изге һәм ыңғай боролош булған. Әммә һылыу ҡыҙҙың атаһы бындай үҙгәреште бик ауыр кисерә, сөнки артислыҡты ул һөнәргә лә һанамай, бигерәк тә ул саҡта... Ә бына әсәһе...

— Театрҙы һайлауымдың сере шул әсәйемә барып терәлә лә инде. Ул үҙе бик матур йырлай, ғөмүмән, сәнғәтте ярата.



*Сара Буранбаева Маянһылыу ролендә*

Уның мин уйнаған бер генә спектаклде лә ҡарамай ҡалғаны юҡ. Үҙегеҙ беләһегеҙ, Әлмөхәмәттән Өфөгә килеүе үҙе бер оло сәфәр. Әммә әсәйем иренмәй: ҡырҡмаһа ҡырҡ эшен ташлап, тамаша ҡарарға килеп етә. Хәйер, әкренләп атайымдың да ҡарашы үҙгәрҙе шикелле...

Сара Буранбаеваның институт тамамлағандан һуң тәүге роле «Иҙеүкәй менән Мораҙым» спектаклендәге Кинйә булды. Төрки халыҡтарының боронғо тормошон һәм көрәшен сағылдырған был эпик әҫәрҙе сәхнәләштереү әле яңы ғына ишектәрен асҡан йәш ижади коллективтың да тәүге эше ине. Әле лә хәтеремдә: театрҙың ошондай ҡатмарлы һәм яуаплы тарихи әҫәргә тотоноуы сәнғәт һөйөүселәрҙе һағайта биреп тә ҡуйғайны: иртәрәк түгелме икән?

Һүҙҙе йәнә Сараға бирәһем килә:

— Күпмеләр дәрәжәлә беҙ быны үҙебеҙ ҙә тойҙоҡ, сөнки театрҙың төп көсөн минең кеүек тәжрибәһеҙ артистар тәшкил итә ине. Ләкин шуны ла иҫтән сығармаҫҡа кәрәктер: коллективҡа Башҡорт академия драма театрында бай тәжрибә туплаған, сағыу талантлы артистар ҙа килеп ҡушылды: Әхтәм Абушахманов, Олег Хановтар ине улар. Ошо сәхнәлә тәүге аҙымдарҙы уларҙан башҡа күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Спектаклдә һәләтле режиссер Йәмилә Әбсәләмова ҡуйғайны. Кинйә — тамашалағы төп роль, ул Туҡтамыш хандың ҡыҙы, трагик образ. Тап ошо хәл йәш башҡарыусы алдында ҡыйынлыҡтар тыуҙырмай ҡалманы, әлбиттә. Тәүге кәртә — тәжрибә наҡыҫлығы, артистка ижадында бындай ролдең быға са булмауы. Ләкин йәшлек ҡыйыулығы, өлкән сәхнәләштәренең эскерһеҙ ярҙамы барыһын да еңеп сығырға булышлыҡ итә артисткаға. Кинйә — аяныслы яҙмышлы персонаж. Ул Мораҙымды ярата. Тик быға атаһының бер туған ағаһы Ҡадирбирҙе ҡаршы. Бына ошондағы тәрән психологик бәрелештәрҙе, бигерәк тә йөрәк һәм аҡыл протесын һынландырыуға өлгәшә актриса был тамашала. Кинйә тураһында күберәк һөйләп ташлауымдың сәбәбе бар: ул артистканың тәүге ҙур, күҙгә күренгән һәм хәтерҙә ҡалған эше булды, иртәгәһе көнөнә ышаныс уятты, таяныс бирҙе.

Әйткәндәй, ҡайһы ваҡыт театр тормошонда шундайыраҡ хәлде лә



10-2001.p65 189 02.11.01, 15:35

күҙәтергә тура килә: теге йәки был башҡарыусыға оҡшаш пландағы ролдәрҙе бирәләр ҙә бирәләр. Ярай ҙа режиссерҙың өмөтө, ышанысы аҡлана барһа, ә аҡланмаһа? Гел генә бүре лә туҡ, һарыҡ та иҫән булмауы ла мөмкин бит. Сара Буранбаева ла шулай бер мәл аптырабыраҡ ҡалғайны: театр етәкселеге йәнә трагик роль тапшырҙы уға. Быныһы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосынан Маянһылыу ине. Тимәк, уның Кинйәһе уңышлы образдар рәтенә ингән.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙы ҡаҙаҡ режиссеры Рәйембәк Сәйембәтов сәхнәләштергәйне. Билдәле булыуынса, был әҫәр ҡаҙаҡ сәхнәһендә лә бара, сөнки унда бер нисә төрки халыҡтың, шул иҫәптән башҡорттоң да, үткәне сағылдырылған.

— Рәйембәк Сәйембәтов — бик үҙенсәлекле, талапсан оҫта, — тип хәтерләй актриса. — Уның менән роль өҫтөндә эшләүе ҡәнәғәтләнеү тойғоһо бирҙе. Дөйөм алғанда, Маянһылыуҙы уйнағанда сәнғәт донъяһын һайлап яңылышмауымды аңланым һәм беренсе тапҡыр үҙемде актриса итеп тойҙом, шуға инандым.

Ошоғаса мин үҙ-үҙенә үтә талапсан йәш актрисаның трагик образдары хаҡында һүҙ алып барҙым. Әммә ул комик ролдәрҙе лә яратып башҡара. Миҫал өсөн Әнисә Дилмөхәмәтова әҫәре буйынса ҡуйылған «Розамы мин, әллә...» спектаклен телгә алырға мөмкин. Дөрөҫ, был роле менән актриса бигүк ҡәнәғәт тә түгел. «Мин унда үҙемде әллә таптым, әллә юк», — ти ул. Бындай батыр һүҙҙе һәр артист та әйтә алмаҫ кеүек. Туфан Миңнуллин әкиәте буйынса сәхнәләштерелгән «Ауыл эте Аҡбай»ҙа актриса бар булмышын егеп, кинәнеп уйнаны һәм лайыҡлы уңышҡа өлгәште. Актрисаның таныуынса, ижад диапазонын киңәйтеү, оҫталығыңды камиллаштырыу, ижад һулышыңды тәрәнәйтеү өсөн репертуарҙа төрлө жанрҙың булыуы мотлаҡ.

Сара Буранбаева тамашасыларға драматик көсөргәнешле ролдәрҙе оҫта башҡарыуы менән дә билдәле. Миҫалға Илшат Йомаголовтың «Буш сәңгелдәк» әҫәренән Рәхимәне, А.Островскийҙың «Төшөмлө урын»ынан Полинаны, Ғәзим Шафиҡовтың «Ҡорбан килтереү» драмаһынан Нәфисәне күрһәтергә мөмкин. Һуңғы эшенә айырым туҡталып китке килә.

Шағир, публицист һәм драматург Ғәзим Шафиҡов был әҫәрендә шиғриәтебеҙ шоңҡары, ҡабатланмаҫ талант эйәһе, әммә ғүмер юлы фажиғәле тамамланыуға дусар ителгән Шәйехзада Бабич шәхесен тасуирлай. Төп героиняларҙың береһе — Нәфисә, спектаклдәге Шәйех, Хәбиб һәм Нәфисә өсмөйөшөндә ҡоршау ролен атҡарып, уны нығытып та, биҙәп тә тора. Был ролдә Сара үҙ һәләтен тағы ла сағыу ыраҡ күрһәтә алды, героиняһын үҫештә биреүгә өлгәште. Тәүге сәхнә менән финал араһында Нәфисә йәшәйешендәге билдәле бер ваҡыт ҡына түгел, ә тотош ғүмере үткәндәй булды. Талант ҡиммәте бына ошондалыр ул. Актриса ижад иткән был образ спектаклде моң, йәм, зар һәм фажиғә менән байытты, уның ышандырыу көсөн күтәрҙе. Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алғы килә: актриса башҡарыуында Нәфисә теүәл образ булып күҙ алдына баҫа: унда барыһы ла — тауыш та, ҡараш та, тойғо ла, кисерештәр ҙә, сәхнәлә үҙ-үҙен тотошо-йөрөшө лә үҙ урынында, артыҡ та, кәм дә түгел. Икенсе төрлө әйткәндә, тамашасы уның уйнауын ҡарап шатланып-һөйөнөп ултырҙы, күңеленән уға яңы уңыштар-үрҙәр теләне.

Шулай итеп, Рәхимә («Буш сәңгелдәк») образында юғары бер маҡсат өсөн үҙ-үҙен ҡорбан итергә әҙер булған ҡатын булып кәүҙәләнһә, Полинала («Төшөмлө урын») бер ҡатлылыҡ, эскерһеҙлек һынландырыла. Ә Нәфисә дәһшәтле, буталсыҡ революция йылдарында үҙаңы уянып килгән йәш быуын вәкиле буларак күҙ алдына баҫа.

Шуныһы айырыуса ҡыуаныслы: героинялар бер-береһенә һис тә оҡшамаған, бер-береһен ҡабатламай, был иһә актриса өсөн ҙур уңыш.

Ләкин Сара Буранбаеваның был хаҡта үҙ фекере бар:

— Әлбиттә, мин был героиняларҙы камил итеп, бөтә тулылығында, кәрәк тәрәнлектә кәүҙәләндерә алдым, тигән уйҙан алыҫ торам. Сөнки һәр актриса үҙенсә уйнай, уның

үҙенә генә хас алымдары, саралары бар, һәр кемдең күңел, йөрәк, уй-фекер һандығы үҙенсә асыла.

Бындай ҡараш үҙе үк иғтибарға, ихтирамға лайыҡ. Ә хәҙер актрисаның һуңғы йылдарҙағы ижадына туҡталып китеү урынлы булыр.

Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт академия драма театры һуңғы йылдарҙа төрлө «сиргә» һабышты, шуларҙың күҙгә иң ныҡ ташланғаны — даими баш режиссерҙың, йәғни театрҙың художество етәксеһенең булмауы. Был хәл репертуар төҙөүҙә, актерҙар составын тулыландырыуҙа һәм бүтән өлкәләрҙә ҡыйынлыҡтарға килтерә. Ошо уҡ сәбәп менәндер, ахыры, һуңғы осорҙа сағыу, баш ҡала, республика тормошонда ваҡиға булырҙай спектаклдәргә ҡытлыҡ һиҙелә. Ләкин һәр ямандың яҡшы яғы ла була, тигәндәй, ара-тирә арыу ғына тамашалар ҙа күренгеләп ҡала. Шулар рәтенә мин Ф.Бүләковтың «Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы» менән Х.Зариповтың «Һүнмәһен-һүрелмәһен» әҫәрҙәре буйынса тамашаларҙы индерер инем. Тәүгеһе драма, икенсеһе комедия булған был спектаклдәр халыҡты залға күпләп йыйыуы һәм тамашасылар күңелен күтәреү йәһәтенән иғтибарға лайыҡ. Спектаклдәрҙең икеһендә лә Сара Буранбаева сығыш яһай. Драмала уға тол ҡатын Нурия роле тапшырылған. Хәйер, әҫәрҙә ҡатын-ҡыҙ образы өсәү, әммә уларҙың тамашасыны үҙенә ылыҡтырып торорҙайы юҡ.

Нурия ролен (ул юҡҡа сыҡҡан ирен көтә) Сара актриса Эльвира Юнысова менән алмашлап уйнай. Уларҙың икеһе лә йәл булып китте миңә ул кистәрҙә, сөнки йөҙөп уйнарлыҡ нигеҙ юҡ тамашала. Дөрөҫ, С.Буранбаева үҙенең йәшлек көсө, талантының ифрат төрлө яҡлы булыуы менән Нурия образына йән өрҙө, уны ысынбарлыҡҡа яҡынайта алды.

«Һүнмәһен-һүрелмәһен» музыкаль комедияһында Сара Буранбаева ифрат ҡыҙыҡ ролдә — Гөлшәкәрҙе уйнап бөтәбеҙҙе лә ихлас шатландырҙы. Уның Гөлшәкәре — яҡтылыҡ, дәрт, илһам менән тулы образ. Героиня үҙенең теремек ҡиәфәте, һылыу йөҙө, нурлы, көләс ҡояшты хәтерләткән йылмайыуы менән һаман күҙ алдында тора. Актриса, осҡа бейеүсе булараҡ, һығылмалы буй-һынын, бар булмышын образды мөмкин тиклем тулыраҡ асыуға йүнәлткән. Шул уҡ ваҡытта уның ҡул һәм тән хәрәкәттәре ифрат тәбиғи, камил. Ғөмүмән, ижади йәһәттән йылдам үҫеүсе был актрисаға Хоҙай тәғәлә бер нәмәне лә йәлләмәгән. Шуғалырмы, сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ул, ҡатмарлы һәм яуаплы ролдәрҙе башҡарып, йәштәр театрының репертуарында лайыҡлы урынды яулағайны, театр сәнғәтенең бөтә жанрҙарында ла берҙәй үк уңышлы сығыш яһап, талантының киң ҡоласлы һәм күп яҡлы булыуын күрһәтә алды. Тажы асылғанда сәскә матур була тигәндәй, өмөтлө актриса яңы труппала — Башҡорт академия драма театрында ла емешле эшләй. Уға, ҙур ышаныс күрһәтеп, роль артынан роль тапшыралар, һәм һис тә яңылышмайҙар. Йәш артистка образ ижад иткәндә юғары маҡсаттар ҡуя белә һәм бөтә көсөн-һәләтен туплап, үҙ алдында торған бурыстарҙы үтәй. Бының артында ғәйәт ҙур тырышлыҡ, көндәлек талапсан хеҙмәт ятҡанын артистканың эшен даими күҙәткәндә лә тойорға мөмкин.

— Сара һылыу, һәр актрисаның хыялында йөрөткән, уйнарға бик тә теләгән ролдәре була...

— Ағай, һеҙ сер итеп кенә һаҡлана торған, изге, әммә ҡайһы саҡта бәйҙән ысҡыныусан аҡылһыҙ уйҙарҙы белергә тырышаһығыҙ түгелме? Булһа булһын, әммә мин уларҙың бер нисәһен әйтеп китергә батырсылыҡ итәм. Сит ил классиктарын, Чехов әҫәрҙәрен уйнарға хыялланам. Булмышым трагедияға тартһа ла, Шекспирҙың берәй комедияһында ихласлап уйнар инем. Ҡыҫҡаһы, репертуарым менән ҡәнәғәт түгелмен әле.

Ун йылдан аҙ ғына артыҡ осорҙа ла ике тиҫтәнән ашыу образ ижад итеп өлгөргән, үҙ-үҙенә ныҡ талапсан, сәхнә һөйөүселәргә ҙур өмөттәр вәғәҙә иткән талантлы был мөләйем йәш алиһә тураһындағы һүҙҙе Назар Нәжмиҙең асыл шиғри юлдары менән тамамлағы килә:

Мең йәшәһен беҙҙең күңелдәргә
Гүзәллектәр сәскән гүзәлдәр.



10-2001.p65 191 02.11.01, 15:35